ВОСХОД
№38 (10136)
Пятница
4 октября 2024 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

# АРҒУЖА

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №3 (156)
ОКТЯБРЬ 2024 ЙЫЛ

МӘКТӘП

## ЭТНОМӘҘӘНИ БЕЛЕМ БИРЕҮҘЕ ҮҪТЕРЕҮ

### РАЙОН АВГУСТ ПЕДАГОГИК КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ СИКТӘРЕНДӘ 2-СЕ АРҒАЯШ УРТА МӘКТӘБЕНДӘ СИЛӘБЕ ҺӘМ ҠУРҒАН ӨЛКӘҺЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ УҠЫТЫУСЫЛАРЫНЫҢ КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ ҮТТЕ

**ГӨЛЪЯМАЛ НӘЖМИЕВА,**
*Ҡорман мәктәбе директоры*
**РИММА ХИБӘТУЛЛИНАНЫҢ фотоһы**

**Унының эшендә 50-нән ашыу педагог ҡатнашты. Конференцияның темаһы «Силәбе һәм Ҡурған өлкәләрендә этномәҙәни белем биреүҙе үҫтереү» тип аталды. Директор Әлфирә Юлдашева мәктәп буйлап экскурсия ойоштороҙо.Артабан кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙы Силәбе өлкәһенең мәғариф һәм фән министрлығы вәкиле Лариса Лейнгард, Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Әлфир Байымов, Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министрлығы вәкиле Илгиз Сәлихов сәләмләне.**

Силәбе өлкәһенең мәғариф һәм фән Министрлығы вәкиле Лариса Лейнгард билдәләүенсә, бөгөн уҡыусыларҙың этномәҙәни белеме – мәғариф сәйәсәтенең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе. Милләт-ара конфликттарҙы иҫкәртеү ысулдарын һәм сараларын эшләү, уҡыусыларҙа милләт-ара аралашыу мәҙәниәтен формалаштырыу, башҡа этностарҙың һәм мәҙәниәттәрҙең рухи ҡиммәттәрен, шулай уҡ патриотик аңды аңлау өсөн этномәҙәни белем биреүҙең педагогик потенциалын йәлеп итеү мөһим. Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Әлфир Байымов уҡытыусыларҙы ҡотланы һәм балалар, ата-әсәләр менән ҙур эш алып барғандары өсөн рәхмәт әйтте. «Бөгөн уҡытыусылар менән осрашыуыма бик шатмын. Беҙ һеҙҙең менән тығыҙ эшләйбеҙ, йыл һайын уҡытыу-методик әҙәбиәт менән тәьмин итеүгә булышлыҡ күрһәтәбеҙ, – тине Әлфир Зөлфәр улы. – 2019 йылдан алып мәктәптәргә 30 меңдән ашыу дәреслек тапшырылды. Быйыл ғына 3,5 меңдән ашыу дананы бүләк иттек. Башҡорт халҡы күпләп йәшәгән ил төбәктәренә айырыуса иғтибар бүлергә тырышабыҙ».



Конференцияла ҡатнашыусылар быуаттан ашыу эшләгән 2-се Арғаяш урта мәктәбе менән танышты.



2-се Арғаяш урта мәктәбе «Сулпан» ансамбленең йәш башҡарыусылары.

Ул шулай уҡ осрашыу урыны осраҡлы һайланмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. 2-се арғаяш урта мәктәбе төбәктә этномәҙәни йүнәлешле иң яҡшы белем биреү учреждениеларының береһе булып тора. Туған тел уҡытыусыларының тырышлығы иғтибарһыҙ ҡалмауы ҡыуаныслы. Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренән бер юлы ике башҡорт теле уҡытыусыһы – Йәлил Садиҡов һәм Идалия Һөйөндөкова «Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы» Бөтә Рәсәй профессиональ конкурста ҡатнашасаҡтар. Силәбе мәғарифты үҫтереү институтының филологик белем биреү һәм туған телдәр кафедраһы мөдире Татьяна Соловьева һөнәри оҫталыҡты күтәреү өсөн конкурс хәрәкәтендә туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй профессиональ конкурста ҡатнашыуының мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Туҡай урта дөйөм белем биреү мәктәбе педагогы Флүрә Закирова өлкә һәм федераль конкурстарҙа уңышлы ҡатнашыуҙа үҙ тәжрибәһе менән бүлеште.

Башҡортостан республикаһы мәғариф министрлығының дәүләт программаларын һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлекте тормошҡа ашырыу бүлеге начальнигы Илгиз Сәлихов башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу хаҡында һөйләне. Унының эшмәкәрлеге 2030 йылға тиклем оҙайтыла. Конференцияла ҡатнашыусылар халыҡ йырҙары нигеҙендә башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәрен, кластан тыш эшмәкәрлектең роле, туған телде уҡытыуҙа тыуған яҡты өйрәнеү материалдарын ҡулланыуҙың отошло яҡтарын тикшерҙе. 2-се Арғаяш төп урта мәктәбе директоры Әлфирә Юлдашева этномәҙәни үҫеш проекттарында ҡатнашыу тәжрибәһе менән уртаҡлашты, был эштә мәктәптең әүҙем позицияла булыу кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

ҠЫҪҠАҺЫ

## Ҡолой ауылы тураһында Башҡортостан Юлдаш телевидениеһында һөйләйәсәктәр

Ҡолой ауылында Башҡортостан Юлдаш телеканалының төшөрөү төркөмө булды. Журналистар шағирә Кәтибә Кинйәбулатованың Ҡолой ауыл китапханаһындағы музейы менән танышты. Кәтибә Кәрим ҡыҙының туғаны Райхана Вәлиеванан интервью алды. Ул тыуған яғын үҙенең ижады менән данлаған билдәле туғаны тураһында хәтирәләре менән ихлас уртаҡлашты. Әлбиттә, фильм төшөрөү төркөмө Арғаяш районының архитектура иҫтәлекле урыны булған Ҡолой ауылының боронғо мәсетендә булды. Ауыл, мәсет һәм уларға нигеҙ һалыусы Мөхәмәтолой Көсөков тураһында тыуған яҡтың тарих белгесе Эдуард Яхин һөйләне. Шулай уҡ Башҡортостан Юлдаш телевидениеһы журналистары генерал М.Шайморатовтың кавалерия дивизияһы һәйкәле тураһында материал төшөрҙө һәм «Тамыр» этноүҙәгендә булды, Арғаяш районында этнотуризмды үҫтереү тәжрибәһе менән танышты.



*Социаль селтәрҙәрҙән фото.*

## Таһир Абдрафиҡов Күсмә халыҡтар Уйындарында ҡатнашты

Рәсәй йыйылма командаһы Милли спорт төрҙәре Федерацияһына нигеҙ һалыусы «Арыслан» V бөтә Донъя Күсмә халыҡтар уйындарында сығыш яһаны, бәйге Астанала (Ҡаҙағстан) үтте. Таһир Абдрафиҡовты Көньяҡ Урал традицион уҡтан атыу мәктәбенә нигеҙ һалыусы булараҡ беләбеҙ. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул «Кырыҫ уҡсы» («Меткий стрелок») хәрәкәтен ойоштора һәм был спорт төрө менән мауығыусы фекерҙәштәрен берләштерә, Силәбе өлкәһенең «Арыслан» милли спорт төрҙәре Федерацияһын етәкләй. Уҡтан атыу менән әүҙем шөғөлләнеп, ул юғары һөҙөмтәләр күрһәтә һәм быйыл илдең йыйылма командаһына инә. «Тамыр» этноүҙәге етәксеһе менән берлектә Туғыҙбай ауылы янында йыл һайын уҡсылар турниры үткәрелә, унда бөтә өлкә лә, шулай уҡ күрше өлкәләр ҙә һәм Башҡортостан Республикаһынан да ҡатнашыусылар йыйыла.



*Римма ХИБӘТУЛЛИНАНЫҢ фотоһы.*

ВАҠИҒА

# КӘТИБӘ КИНЙӘБУЛАТОВАНЫҢ ИСЕМЕН ЯҠТАШТАРЫ ХӨРМӘТ ИТӘ

## ҠОЛОЙ АУЫЛЫНДА КӘТИБӘ КИНЙӘБУЛАТОВА ИСЕМЕНДӘГЕ ӘҘӘБИ ПРЕМИЯНЫ ТАПШЫРЫУ ТАНТАНАҺЫ ҮТТЕ

**НАТАЛЬЯ ПЫХТИНА,**
*Арғаяш районының Үҙәкләштерелгән китапхана системаһы директоры*
**РИММА ХИБӘТУЛЛИНАНЫҢ** фотоһы

**Билдәле яҡташыбыҙ, шағирә Кәтибә Кинйәбулатова иҫтәлегенә әҙәби премия 2017 йылда депутаттар Йыйылышы ҡарары менән булдырылды. Раҫланған Положениеға ярашлы, ул ике йылға бер тапҡыр бер юлы ике авторға тапшырыла.**



Шағирә Кәтибә Кинйәбулатова. Архив фотоһы.

### ТЫУҒАН ИЛ МЕНӘН БӘЙЛӘНЕШЕН ЮҒАЛТМАЙ

Төп маҡсат– үҙенсәлекле һәм ҡыҙыҡлы авторҙарға ярҙам итеү, урындағы әҙәби һәләттәрҙе дәртләндереү генә түгел, ә уларҙың ижадын популярлаштырыу, үҫеп килгән быуынды тыуған яҡтың яҙыусылары һәм шағирҙарының иң яҡшы ижад өлгөләрендә тәрбиәләү.

Тантана башланыр алдынан ҡатнашыусыларҙы Һәм ҡунаҡтарҙы Кәтибә Кинйәбулатова исемендәге Павленк моделле китапханаһына экскурсияға саҡырҙылар. Бында Кәтибә һәм Уран Кинйәбулатовтарҙың музей бүлмәһе булдырылған. Апалы-ҡустылылырҙың яҙмышы һәм ижады тураһында музейҙан күп мәғлүмәттәр алырға мөмкин. Ҡыҙыҡлы осрашыу «Шишмә» тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейында ла булды. Ҡолой ауылы тарихы, уның билдәле кешеләре хаҡында күп һанлы экспонаттарҙан тулы мәғлүмәттәргә юлығаһың. Музейҙың барлыҡҡа килеү тарихы, 2000-гә яҡын экспонат экспозицияһының нисек йыйылыуы тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр алаһың. Музейҙа Кәтибә Кинйәбулатоваға бирелгән Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге республика премияһы лауреаты дипломы (1989) һәм «Почет Билдәһе» ордены (1991) айырым урын биләй.



Китапхана энтузиастары Әлмира Мөхәмәҙиева, Мәүлиә Мәмлиевалар эшмәкәрлеге арҡаһында Кәтибә Кинйәбулатова музейы шағирә ижадын һөйөүселәр өсөн рухи үҙәккә әүерелде.

Шағир үҙенең әҫәрҙәрендә тыуған яҡ темаһына йыш мөрәжәғәт итә, әҙибә бер ҡасан да үҙенең тамырҙарын һәм яҡташтарын онотмай. Кәтибә Кинйәбулатова исемендәге премия булдырыу – ул билдәле яҡташыбыҙҙың талантына һәм ижадына дан йырлау. Бүләкләү тантанаһы Ҡолой мәҙәниәт йортонда үтте. Арғаяш муниципаль районы башлығы урынбаҫары Гөлнара Мусина һәм Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһе буйынса вәкиле Әлфир Байымов, Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе Ҡамса Мортазин сәләмләү һүҙе менән сығыш яһаны. Тамаша залына башҡорт шиғриәтен һөйөүселәр, ижадҡа яңы башлап килгән, билдәле авторҙар, әҙәби берләшмәләр етәкселәре һәм ағзалары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, Силәбе өлкәһенең төрлө төбәктәренән йәмәғәтселәр, туған теленә битараф булмағандар йыйылды. Быйылғы лауреаттар бик тә лайыҡлы мәртәбәле премияға. «Нәфис әҙәбиәт» номинацияһында шағирә Һәм яҙыусы, Рәсәй яҙыусылар Союзы, Урал «Талисман» ижади берекмәһе ағзаһы Елена Янышева премия лауреаты тип баһаланды. Ғалим, тарихсы, тыуған яҡты өйрәнеүсе, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре Рәшит Хәкимов «Тыуған яҡты өйрәнеү» номинацияһында премия лауреаты тип танылды. Сәхнәнән Кәтибә Кинйәбулатованың шиғырҙары, Кәтибә Кәрим ҡыҙы менән яҡындан таныш булған кешеләрҙең хәтирәләре яңғыраны. Тамашасылар алдында Кәтибә Кәрим ижадын яратыусылар, шағирәнең туғандары, китапхана хеҙмәткәрҙәре һүҙ алды. Сараны Арғаяш районының ижади коллективтары: «Ҡолой моңдары» халыҡ фольклор ансамбле, Байрамғол ауыл мәҙәниәт йортоноң «Сулпан» вокаль ансамбле, Ҡолой ауылы бейеү коллективтары сығыштары биҙәне. Уларҙың һәр береһен рәхмәтле тамашасылар алҡыштар менән оҙатты.

*«Аргужа» сығарылышы өҫтөндә Гөлъямал Нәжмиева, Сабира Шәрипова составындағы йәмәғәт редакцияһы эшләй. Нурия Иҡсанова тәржемәһе.*

**ҠАМСА МОРТАЗИН,**
*Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе*



**Алда – фашизмды Еңеүҙең 80 йыллығы. Ошоға бәйле Кәтибә Кинйәбулатованың ижады үҙенә тағы ла ныҒыраҡ иғтибар йәлеп итә. «Ата тауышы» һәм «Тереләргә әйтер һүҙ» повестары, «Нур-бала» поэмаһы, «Ветерандар» китабы һәм башҡа бик күп әҫәрҙәре Бөйөк Ватан Һуғышы темаһына арналған. Кәтибә Кинйәбулатованың бөтә тормошо – ул ныҡлыҡ һәм батырлыҡ һынауы: атаһының репрессияға дусар булыуы һәм ауырыуы, һуғыш, һуғыштан һуңғы ауыр йылдар, айырылғыһыҙ ҙур ғаиләһе, ундан ашыу бала тәрбиәләгән әсәһе... Кәтибә Кинйәбулатованың тормошо һәм ижады һәр беребеҙгә өлгө алыуҙың сағыу үрнәге булып тора.**

ҠЫҪҠАҺЫ

### АЛЬБЕРТ КӘРИМОВ МЕНӘН ОСРАШЫУ ҮТТЕ

**Мәтәл ауыл клубында Ғаилә йылына арналған «Ағас тамырҙары менән көслө» тип аталған тыуған яҡты өйрәнеүселәр осрашыуы уҙғарылды.**

Беҙҙә ҡунаҡта ғалим, ДНК һәм генеалогия буйынса эксперт, «Башҡорт ырыуҙары тарихы» күптомлыҡ китабы авторҙарының береһе Альберт Кәримов булды. Альберт Әлтәф улы әлеге көндә «ДНК – башҡорт ырыуҙары генеалогияһы» темаһы буйынса яңы китап өсөн мәғлүмәттәр йыя. УЛ ДНК, башҡорт ырыуҙарының гаплотөркөмдәре тураһында лекция уҡыны, башҡорт ырыуҙарының генетик туғанлығын аңлатты. Сарала ҡатнашыусы әйле һәм табын ырыуҙары вәкилдәренән ДНК өлгөләрен алды. Мәтәл һәм Сәләй ауылынан Иҡсановтар, Хисмәтуллиндар, Яҡуповтар, Әфләтуновтар һәм Зәйнуллиндар шәжәрәһен өйрәнеү буйынса материалдар осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙа айырыуса ҡыҙыҡһыныу уятты.

### УНИКАЛЬ ЭТНОГРАФИК БАҪМА ҺАҠЛАНҒАН

**Мәтәл ауыл мәҙәниәт йорто музейында этнограф Александр Бессоновтың китабы һаҡлана.**

Александр Геннадий улы этнограф һәм фольклор йыйыусы. 1906 йылда беҙҙең яҡтарға килә. Ул урындағы ҡарттарҙан башҡорт легендаларын һәм әкиәттәрен яҙып ала, улар «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» баҫмаһына инә. Был уникаль йыйынтығы өсөн ғалим император Рус география йәмғиәте ағзаһы итеп ҡабул ителә һәм бәләкәй алтын миҙал менән бүләкләнә. Бөгөн был китап менән Мәтәл ауыл мәҙәниәт йорто музейында танышырға мөмкин.

### СНЕЖИНСК ҠАЛАҺЫ ВЕТЕРАНДАРЫ «ТАМЫР» ЭТНОҮҘӘГЕНДӘ БУЛДЫ



**«Тамыр» этноүҙәге Туғыҙбай ауылы янында, Яубалыҡ күле буйында урынлашҡан.**

Ул башҡорт милли мәҙәниәте үҙәге булараҡ иғтибарҙы йәлеп итә. Бында башҡорттарҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре һәм милли кейемдәре менән танышырға киләләр. Уларҙы ғәҙәти булмаған фотолар төшөрөү өсөн кейеп ҡарарға ла мөмкин. Иң ҡыйыуҙары өйрәтелгән аттарға атланып, башҡорт традицион йәйәһенән атырға ҡыйыулыҡ итә.

Үҙәк етәксеһе Руслан Нафиҡов һәм уның иҫ киткес ярҙамсылары –Дәрүиш ауылы ветерандары, ҡунаҡтар өсөн халыҡ уйындары үткәрә һәм, әлбиттә, башҡорт аш-һыуының традицион ризыҡтарынан йомарт өҫтәл әҙерләй. Ошо көндәрҙә «Тамыр» этноүҙәгендә Снежинск ҡалаһы ветерандары булып ҡайтты. Улар башҡорт мәҙәниәте менән яҡындан танышыу бәхетенә ирештеләр, көс-дәрт алдылар.

*Руслан Нафиҡовтың фотоһы.*